*Зәкиә МЫРҘАҒОЛОВА,*
*БДУ доценты*

# Гөлдәр баҡсаһының нурлы балҡышы

## Сәйф Сараиҙың “Гөлистан бит-төрки” әҫәрендә суфыйҙар психологияһы сағылышы

Мысырҙа мәмлүктәр династияһы хакимлыҡ иткән дәүерҙә фән һәм мәғариф үҫеше өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыла. Татар-монголдар көслө мәмлүк ғәскәрҙәренең ҡаршылығына дусар булып, Мысырҙы яулай алмайҙар. Ошо йәһәттән татар-монголдар хакимлығы аҫтында ҡалған дәүләттәрҙән — Урта Азиянан, Ирандан, Иҙел буйы төркиҙәренән байтаҡ уҡымышлы кешеләр Мысырға килеп төпләнә. Был, үҙ сиратында, мәмлүктәр дәүләтендә ғәрәп, фарсы, төрки-ҡыпсаҡ телдәрендә фән һәм әҙәбиәттең киң үҫеш алыуына килтерә.Төрки шағиры Сәйф Сараиҙың үҙ ерҙәрен ташлап, Мысырға аяҡ баҫыуының сәбәптәренең береһе ошо гөрләп торған мәҙәни тормоштоң үҙенә йәлеп итеүе лә булғандыр.

Сәйф Сараиҙың фарсы суфый шағиры Сәғҙиҙең мәшһүр “Гөлистан” әҫәрен төрки теленә тәржемә итеүе уның әҙиплек эшмәкәрлегенең оло бер ҡаҙанышы булып тора. Сәғҙиҙең ижад емешен ҡулына алғанда төрки шағирының суфыйсылыҡ мәктәбе менән яҡшы таныш булыуы бәхәсһеҙ. Быны беҙ Сараиҙың “Гөлистан бит-төрки” әҫәренә яҙған инеш һүҙенән тойомлай алабыҙ. “Элек яҙ көндәрендә бер көн бостан эсендә гөлдәр араһында бер нисә зариф ғалимдар менән ултырып, инша ғилеменән бәхәс ҡылып, әбйате ғариб вә эш гаре гажиб уҡыным иһә, ул ғалимдарҙың олоһо ғаруз ғилеменән бер мөшкил бәйеттең тәкътыйгын сөаль итте...” Олуғ ғалим шағирҙы һынағандан һуң, Сәғҙиҙең “Гөлистан” әҫәрен төрки теленә тәржемәләргә тәҡдим итә. “Иншаәә аллаһу тәғалә боерса! Әммә куватем зәгыйф торыр аның кави мәғнәләренә”, — тип төрки шағиры Сәғҙи әҫәренең тәрән мәғәнәһен — ғәжәйеп йөкмәткеһен, күҙгә күренмәгән серле яҡтарын тәржемәлә бирә алыуы буйынса борсолоу белдерә.

Сәйф Сараиҙың “Гөлистан бит-төрки” әҫәрен аңлар өсөн уның тәү сығанағы булған “Гөлистандың” авторы Сәғҙи ижадына күҙ һалыу кәрәк. Фарсы шағиры Сәғҙи Ширази суфыйҙарҙың Нәкшбәндиә тәриҡәте ағзаһы була, Бағдадта Низамийа мәҙрәсәһендә белем алған, байтаҡ ғүмерен дәрүишлектә үткәргән, илдәр гиҙгән. Үҙенең башынан үткәргән, күргән, ишеткән хәл-ваҡиғаларға

нигеҙләнеп ижад итә ул “Гөлистан” китабын. Мауыҡтырғыс хикәйәттәрҙән торған был китаптың структураһы ла, теле лә ябай. Әммә бирелгән художестволы материалдың бер нисә ҡатламы бар. Тышҡы ҡатламы һәр уҡымышлы, зиһенле затҡа тәғәйенләнгән әхлаҡи-этик ҡанундар йыйынтығын хәтерләтһә, суфыйҙарға йүнәлтмә биреүсе практик ҡулланма хеҙмәтен үтәр нескә эске ҡатламдары ла бар әҫәрҙең. Сәйф Сараи фарсы әҫәренең ошо ҡатмарлы, ҡатлаулы йөкмәткеһен юғары поэтик телдә тәржемәләй алған.

Сәйф Сараиҙың “Гөлистан бит-төрки” дастанын төрлө төҫтәге нурҙар менән балҡыған гәлсәр менән сағыштырырға мөмкин. Ғәжәйеп нурҙарҙы һәр уҡыусы үҙенсәлекле бер балҡышта күрә ала — был уның аң-зиһен кимәле, тормош тәжрибәһе менән бәйле. Ошо рәүешле дастандағы хикәйәт-хикмәттәргә аңлатма биреүҙәр ҙә ҡырҡ төрлө булыуы мөмкин. Ҡайһы берәүҙәр хикәйәттәрҙә социаль-ижтимағи проблемалар, ҡайһы берәүҙәре мораль-этик мәсьәләләр күтәрелешен күҙәтер, өсөнсөләре иһә кешенең сикһеҙ психик мөмкинлектәре, метафизика күренештәре хаҡында мәғлүмәттәр табыр.

Дастандың тәүге бүлеге батшалар тормошон сағылдыра. Беренсе бабҡа индерелгән хикәйәттәрҙә хаким һәм халыҡ, хаким һәм дәүләт мәсьәләләре күтәрелә. Бында автор хакимдың мораль-этик йөҙөнөң — уның аҡылының, холҡоноң, мәҙәни кимәленең тотош ил, халыҡ яҙмышына тәьҫир итеүен асып бирә. Авторҙың был фекерҙәре бер нисә хикәйәттә һәм шиғри юлдарҙа асыла: “Фәридүннең малы һәм ғәскәре ул надәр күб дәгел иде, нисек аңа мәмләкәт мөкаррар булды? Вәзир әйтте: мәмләкәт аны теләб килеб, мөгавәйәт кылдылар. Ул дәгый кәрәм куркузеб, солтан булды. Халыкның килмәке — солтанат күрке дорыр”. Был хикәйәттә хакимдың күркәм сифаттары, йомартлығы халыҡты, илде туплар тылсымлы көс булараҡ аңлатыла.

Түбәндәге шиғри юлдарҙа, киреһенсә, солтандың кире холҡоноң насар эҙемтәләргә килтереүе әйтелә:

Золм ҡылһа мәлик рәгыйәткә,
Ля жәрм, мәмләкәт хәраб булыр [7, 56].

Беренсе бабҡа тупланған хикәйәт, хикмәттәрҙә солтандарҙың вәзирҙәре менән мөнәсәбәте, уҡымышлылар менән аралашыуҙары, фәҡирҙәргә мөғәлләмәһе сағылыш таба. Күләмдәре йәһәтенән ҙур булмаған был мауыҡтырғыс, ғибрәтле әҫәрҙәр хакимдарға тәғәйенләнгән тормошсан, файҙалы кәңәштәр йыйылмаһы булараҡ ҙур әһәмиәткә эйә. Шул уҡ ваҡытта, мәликтәр тормошо һүрәтләнеше арҡылы, автор ябай әҙәми заттың “нәфс” һәм “рухилыҡ” кеүек нескә психологик булмышы хаҡында философик һүҙ йөрөтә. Бында Сәйф Сараи кешеләрҙе рухи үҫештән тотҡарлаусы, мин-минлек, тәкәбберлек, аҙғынлыҡ, яуызлыҡ, һаранлыҡ, ғәйбәтселек, көнсөллөк, эскерле булыу кеүек кире һыҙаттарҙы тәнҡит утына ала. Бер хикәйәткә иғтибар итәйек: “Иран мәликтәренән бер мәлик ҡартлыҡ халәтендә хәстә булыб, тереклектән өмид кисеб иде. Нагяһ ишекдән бер кемирсә кереб, һөйөнөслө хәбәр килтерә: “Фәлән ҡәлғәне, мәлик дәүләтендә ғәскәр еңеп, фәтх иттеләр...” Был һүҙҙе ишеткән мәлик “аһ” итеп әйтте: “Бу хәйр хәбәре

миңә түгел, минең дошмандарыма торор, йәғни мәлик вариҫтарына” [7, 59]. Хикәйәттә үлем алдында тороусы ҡарт солтандың әхләҡи йөҙө фаш ителһә, бер яҡтан, икенсе яҡтан, тәхеттең, байлыҡтың, йәғни матди тормоштоң алдатҡыс бер ялтырауыҡ ҡына икәнлегенә ишара яһала:

Бу көн теләгем иреште, һәм нә файда кем,
Өмид йук ни, кичеб гомер бер йәнә килгәй.

Сәйф Сараиҙың “Гөлистан бит-төрки” дастанында бабтар үҙҙәренең эске мәғәнәләре йәһәтенән суфыйсылыҡ юлының баҫҡыстарына ярашлы бирелгән: шәриғәт, тәриҡәт, мәғрифәт, хәҡиҡәт. Беренсе бүлек, асылда, шәриғәт баҫҡысының — әхлаҡи йәһәттән таҙарыныу этабының художестволы сағылышы ул. Бында тупланған хикәйәт-хикмәттәрҙә рухи үҫеш юлына килеүселәрҙең насар ғәмәлдәрҙән, ғәҙәттәрҙән үҙҙәрен арындырыуы, таҙарыныуҙары кәрәклеге аңлатыла.

Батша хеҙмәтендә торған, һуңынан эштән ҡыуылған вәзирҙең фәҡир дәрүиштәр араһында көн күреүе, һуңынан хакимдың уны йәнә хеҙмәткә саҡырып та, вәзирҙең баш тартыуы хаҡындағы хикәйәткә иғтибар йүнәлтәйек: “Мәлик әйтте: “Ләхәрәм (һис шикһеҙ) беҙгә бер камил белекле ир кәрәк, кем мәмләкәт эштәренә ярағый”. Вәзир әйтте: “Эй мәлик, камил белекле ир ул торыр кем, бының кеүек эштәргә күңел бирмәгәй” [7, 65].

Был хикәйәттә кеше күңелендәге, аңындағы нескә психологик һынылыш — әҙәмдең “нәфстән”, йәғни ерҙәге матди теләктәрҙән азат булып, “йөрәк аңы” кимәленә күтәрелеүе хаҡында һүҙ бара.

Суфый шағирҙар ижадында “йөрәк” тигән төшөнсә бик йыш ҡулланыла. Быны беҙ Сәғҙи, Рудаки, Ғүмәр Хәйәм, Әбү Ғәли Сина һәм башҡа көнсығыш әҙиптәре ижадында күҙәтәбеҙ. Суфыйҙар телендәге “йөрәк” төшөнсәһенә “рухи йөрәк” тигән тәрән психологик мәғәнә һалынған. “Рухи йөрәк” рухтың нескә йоғонтоһо менән “нәфстең” тупаҫ тәьҫире араһында әйләнеп тора. Был хәл-торош суфыйсылыҡ буйынса абруйлы белгес Нурбахши хеҙмәттәрендә ентекле яҡтыртыла [6].

Ҡамиллыҡҡа ынтылғанда илаһилыҡтың төрлө кисерештәре ошо “рухи йөрәк” аша үткәрелә. Дастандың икенсе бүлегендә был ҡатмарлы психологик кисерештәр суфыйҙар эшмәкәрлеге аша аңлатыла.

“Гөлистан бит-төрки” әҫәренең фәҡирҙәр тормошон һүрәтләүгә арналған икенсе бүлегендә суфыйсылыҡтың тәриҡәт баҫҡысының асылы, үҙенсәлектәре хаҡында һүҙ бара. Уймаҡ хикәйәттәрҙә, шиғри текстарҙа рухи эҙләнеү юлына баҫҡан дәрүиштәрҙең әҙәми тәбиғәте һәм әхлаҡи йөҙө араһындағы конфликт, хаталар һәм уңыштар анализлана. Мәҫәлән, бер хикәйәттә заһидтың солтанда ҡунаҡ булғанда аҙ ашауы, солтан ышанысын яулау маҡсатында күп намаҙ ҡылыуы хикәйә ителә. Бында автор суфыйҙар араһында ла ике йөҙлөлөктән ҡотола алмағандар булыуы хаҡында аңғартһа, бер яҡтан, икенсе яҡтан, практик күнекмәләрҙең кемгәлер күрһәтеү өсөн түгел, ә рухи эҙләнеүселәрҙең үҙҙәренә мөһим икәнлеген төшөндөрә. Икенсе бер хикәйәттә бер изгенең өйөнә уғры төшөүе, уғрыға урларға бер нәмә лә булмағас, изгенең үҙе ятҡан келәмен тартып ебәреүе хаҡында һөйләнелә. “...әһле сафа (изге зат) йөҙҙә ни иһә, нафада (эсендә)

улдыр, — аслы яман монафиҡ кеби түгелдер”, — тип һығымта яһай автор. Ҡайһы бер суфыйҙарҙың эске күңел торошторының тышҡы эшмәкәрлектәренә тура килмәүен әҙип оҫта образлы сағыштырыуҙар аша фаш итә:

Киеб хирна (дәрүиштәр еләне), йөрөр заһид, аҙыб юл,
Ишәккә кейҙереп Ҡәғбә тунын ул [7, 93].

Автор рухи эҙләнеү юлына баҫыусы дәрүиштәрҙең әҙәми тәбиғәтен, йәшәйеш рәүешен, әхлаҡи йөҙөн илаһи камиллыҡҡа өлгәшеүгә йоғонто яһаусы мөһим факторҙар булараҡ анализлай.

Ошо уҡ икенсе бүлектә суфыйҙар юлындағы һәр төрлө мәҡамдар (торош-тар) асылы хаҡында һүҙ йөрөтөлә. Тәүбә, вара, зухд, факр, сабр, таваккул тип аталған психик хәл-торошто образлы сағылдырған хикәйәттәрҙе был бабта осратып була. Мәҡамдарҙың һуңғыһы, иң камилы “риза” йәки “ҡәнәғәт” тип атала. Сәйф Сараи дастанында был торошто һүрәтләүгә тотош бүлек — өсөнсө баб арналған. Ҡәнәғәт булыуҙың асылы — “Алла ла улар менән риза, улар ҙа Алла менән риза” тигән фекергә ҡайтып ҡала. Ҡәнәғәт булыу торо-шона суфыйсылыҡтың юғары баҫҡыстарында өлгәшелә [2; 3; 4]. Ҡәнәғәтлек, йәки риза булыу — “хәҡиҡәттең бөйөк ҡапҡаһы һәм ул ерҙәге ожмах”:

Эй, ҡәнәғәт, мәне баетҡыл кем,
Сәндан олы жәһанда ниғмәт юҡ, —

тип яҙа автор үҙе [7, 127].

Ҡәнәғәтлек хәлендә суфый шатлыҡтарҙы ла, ғазаптарҙы ла Алла ихтыяры булараҡ ҡабул итә.

Ерҙәге күп боҙоҡлоҡтарҙың, енәйәттәрҙең сәбәбе нәфселә, аҙ менән ҡәнәғәт булмауҙан тип белдерелә:

Китәр башы анының бер көн бу йулда,
Ничә күп мал вә мөлк асрар булса [7, 136].

Суфыйҙарҙа кемгәлер хеҙмәт итеүгә ҡарағанда, үҙеңә үҙең “икмәк үҫтереп ашауға” өҫтөнлөк бирелгән. Сәйф Сараи әҫәрендә был фекер айырыуса көслө яңғырай: 13-сө хикәйәттә былай тиелә: “Хатиме Тайиға әйттеләр: “Йыһанда һинән оло һиммәтле күргәнең йә ишеткәнең бармы?” Әйтте: “Бер көн ҡырҡ дөйә ҡорбан итеп, ғәрәп бәктәрен ҡунаҡ иттем. Хәжәт өсөн тышҡа сығып күрҙем: бер ир бер йөк сыбыҡ күтәреп һатмаға килер ине. Йөгөн ергә ҡуйып тыңланы. Мин уға әйттем: “Ни өсөн Хатиме Тайинең саҡырыуына барманың кем, халыҡ табынға йыйылып ризыҡ ашарҙар”. Ул әйтте “Кем үҙ хеҙмәте менән ризыҡ таба, ул Хатим ярҙамына мохтаж түгел”. Ул кеше минән һиммәтлерәк” [7, 141].

Бер фәҡиргә кинәт байлыҡ килеп төшөүе, уның, йәһәт килгән байлыҡты күтәрә алмайынса, яҙыҡ юлға баҫып, төрмәгә эләгеүе хикәйәтендә лә эшләп ризыҡ табыуҙың, ғөмүмән, хеҙмәттең әһәмиәте күрһәтелә.

Һәр бер ир бер эш өсөндөр, һәр бер эш бер ир өсөн.
Мәслихәт ул: үҙ эшен эшләгәй һәр зуфөнун [7, 143], —

тип С.Сараи һөнәргә эйә булыу кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә ала. Ғөмүмән, әҙип үҙ әҫәрендә хеҙмәтте кешене тәрбиәләү сараһы тип таный, рухи үҫеш юлында хеҙмәт һөйөү мөһим фактор булараҡ баһалана.

“Гөлистан бит-төрки” дастанының “Ғишыҡлыҡ хәлендәге егет сифаты” тип аталған бишенсе бабы суфыйсылыҡ юлындағы иң юғары кимәлде — хәҡиҡәт баҫҡысындағы хәл-торошто тасуирлай. Хәҡиҡәткә өлгәшкән суфый йәшәйештең хаҡ асылына төшөнә. Шуға күрә лә суфыйҙар бында үҙҙәрен ахлак-хакика (ысын йәшәйеш кешеләре) тип атайҙар [1; 2; 4]. Хәҡиҡәттә суфый илаһи ысынбарлыҡты, нисек бар, шулай күрә, образлы әйткәндә, “Алланың үҙенә Алла күҙе менән ҡарай”. Был мистик торошта суфый үҙен телһеҙ ғашиҡ хәлендә тоя. Сәйф Сараи әҫәрендә был торош түбәндәгесә һүрәтләнә:

Ҡачан күңлеңдә кылса гыйшк мәскән
Әлифдән “би” вә “ти”не белмәгәйсән [7, 165], —

йәғни, “әгәр ҙә Ҡөрьәнде быға тиклем яттан белгән булһаң, ғашиҡ хәлендә “би” менән “ти”не лә әйтә алмаясаҡһың. Аң менән рухи халәттең был мәлдәге нескә торошон автор бер нисә юлдарҙа асып бирә:

Күреп ул ай бикин йөзне, сәңа булыб мән кол,
Йәнә оныттым үҙемне булып сәңа мәшгуль [7, 165].

Ислам дине теологтарының аңлатыуынса, был юғары рухи кимәлдә ирфан (эҙләнеүсе) үҙен-үҙе онота, тулыһынса йыһанда (Аллала) эрегән кеүек хис итә, уның өсөн “мин” тигән төшөнсә юҡҡа сыға [1; 2; 3]. Шуның өсөн дә был халәтте икенсе төрлө — үлем менән сағыштырып һүрәтләйҙәр:

Килде килүбәг — йәнә мине үлтергән,
Үлтергәненә үҙе көеб килде йәнә [7, 165].

Сәйф Сараиҙың “Гөлистан бит-төрки” әҫәрендә баштан аҙаҡҡаса бер нисә фекер ҡыҙыл еп булып үтә. Беренсенән, рухи үҫеш юлын һәр кем үҙенсә үтә, һәр инсандың эҙләнеү юлы, кисерештәре бик үҙенсәлекле, индивидуаль.

Икенсенән, әхлаҡи эҙләнеүҙең төп маҡсаты — ул мөхәббәт. Кеше үҙ өҫтөндә оҙайлы, ныҡышмалы эшләгәндән һуң юғары әхлаҡилыҡҡа — ысын мәғәнәһендәге мөхәббәтлелек хәленә өлгәшә, уның төп йәшәү мәғәнәһе мөхәббәт менән кешелеккә эскерһеҙ хеҙмәт итеүгә йүнәлтелә.

“Гөлистан бит-төркинең” етенсе һәм һигеҙенсе бабтарында кешенең интеллектуаль мөмкинлектәре тураһында һүҙ бара. Был бүлектәрҙәге хикәйәт-хикмәттәрҙә интеллект мәсьәләһе бер нисә аспекттан сығып яҡтыртыла. Тәбиғәттән зиһен бирелмәгәндәр, тыумыштан зиһенле булғандар, зиһен дә бирелеп, тырышлыҡ менән юғары интеллектуаллыҡҡа өлгәшеүселәр классификациялана. Миҫалдар:

1) Бер этне йиде диңгездә йуса, чөн булды уш, пәлидрәк торыр.
(Этте ете диңгеҙҙә йыуһаң да бысраҡ булыр).
Гыйса ишәген Хижазә илтеб килтерсә, йәнә һаман ишәк торыр.
(Ғайса ишәген Хажға килтерһәң дә ишәк булыр) [7, 195].

2) Һәр саҡ алтын-көмөш таш эсендә хасил була,
Ләкин барлыҡ таш эсендә юҡтыр алтын-көмөш,
Барһына тейәр Сөһәйл нуры, ләкин
Бер ерҙә булыр жораб, бер ерҙә — ҡәҙим [7, 201].

Сәйф Сараиҙың “Гөлистан бит-төрки” әҫәре тәрән психологизм менән һуғарылған. Бында һәр бер дини-мистик термин үҙе ҡатмарлы психик

хәлде, эмоцияларҙы сағылдыра. Мәҫәлән, фанилыҡ йәки баҡыйлыҡ тигән төшөнсәләргә тотош билдәле бер психик-интеллектуаль хәл-тороштоң үҙенсәлекле картинаһы һалынған. Образдарҙың һынланышында кешеләргә хас бай эмоциональ күңел торошоноң төрлө төҫтәрен күҙәтәбеҙ — геройҙарҙы һоҡланыу, ғәжәпләнеү, икеләнеү, ярһыу, ҡурҡыу, битарафлыҡ, агрессия һәм башҡа эмоциональ халәттәрҙә күрәбеҙ.

Суфый әҙиптәр үҙ әҫәрҙәрендә кешеләрҙәге психик-эмоциональ хәлдәрҙе һәр төрлө төҫтәр аша сағылдырыр булғандар. Суфизмдағы был теорияға Урта Азияла, Мысырҙа киң билдәле булған суфый Нәжметдин Ҡубро нигеҙ һала [5]. Уның теоретик-практик мәктәбендә һәр рухи үҫеш этабының үҙ төҫө бар: аҡ төҫ — ислам, һары төҫ — иман, зәңгәр төҫ — ысын инаныу төҫө — был мөридтең күңеленең тулыһынса Аллаға ышаныс менән ялманып алыуы торошо. Ҡыҙыл төҫ — рухтың йәндән айырылып сыға башлауы, рухи донъяны таныу. Был торошто — мәғрифәт, белем тип билдәләү бар. Ҡара төҫ — рухтың үҙ үҫешендә төп маҡсатҡа етә алыуын символлаштыра — илаһи донъя тупһаһы. Йәшел — тулы ышаныс төҫө. Төҫтәр — улар мөридтең билдәле бер рухи үҫеш кимәлендәге донъяны күреү картинаһы. Ошо философияға ярашлы, төрлө рухи кимәлде — аҡ, һары, ҡыҙыл, зәңгәр сәскәләрҙән торған гөлдәр баҡсаһы образы аша биреү ҡалыплашҡан. Сәиф Сараи әҫәрендә ул былай яңғырай:

Биҙәнеп бағ бостан тотто зиннәт.
Ботаҡтар алды бостандан йәнә баж (өлөш),
Сәскәләрҙән үренеп һәр бере таж... [7, 39].

Йомғаҡлап әйткәндә, Сәйф Сараи суфыйсылыҡ философияһын, әҙәбиәтен тәрән аңлаған шәхес булған. Ҡатмарлы ғилми-теоретик, практик фекерҙәрҙе нескә поэтик образдар аша бирә алыуы уның юғары интеллекты һәм дә шағирлыҡ һәләте хаҡында һөйләй.

### Әҙәбиәт


1. *Али-заде А.А.* Тасаввуф // Исламский энциклопедический словарь. — М.: Ансар, 2007. — 400 с.
2. *Аль-Газали Абу Хамид.* Исследования сокровенных тайн сердца. — М.: Ансар, 2008. — 472 с.
3. *Аль-Газали Абу Хамид.* Весы деяний. — М.: Ансар, 2004. — 216 с.
4. *Игнатенко А.А.* Познать непознаваемое (аль-Газали о рациональном познании трансцендентного) // Средневековая арабская философия. Проблемы и решения. — М., 1998.
5. *Нажметдин Кубро (Рисола).* Тарикат каброси // Комилов Н. Тасаввуф. Икинчи китаб. Тавх, ид, асрори: Ташкент, 1999. — 157 бит.
6. *Нурбахши Джавад.* Психология суфизма. — М.: Амрита-Русь, 2004. — 158 с.
7. *Сәйф Сараи.* Гөлестан. Лирика. Дастан / Әсәрләрне басмага әзерләүче Миңнегулов Х.Й. — Казан: Татарстан китап нәшрияте, 1999. — 296 бит.